Һорауҙарға яуап бирер алдынан инструкцияны иғтибар менән уҡып сығығыҙ.

Башҡорт теле буйынса Аҡмулла олимпиадаһының был турында текст буйынса эш тәҡдим ителә. Бирелгән тексты иғтибар менән уҡып сыҡҡандан һуң 20 һорауға яуап бирергә кәрәк буласаҡ, улар өс өлөшкә бүленә. 1-се (А) өлөшөндә һайланма яуаптар менән тест тәҡдим ителә. Был теста 10 һорау, һәр һорауға 4 төрлө яуап килтерелә, шул яуаптар араһынан 1 дөрөҫ вариантты һайлап, һеҙ яуаптар бланкыһында ошо эшкә тәғәйен шаҡмаҡтарҙа тамға ҡуйырға тейеш булаһығыҙ.

2-се (В) өлөшөндә 6 эш бирелә. Һорауҙары менән яуаптары ярашҡан варианттарҙы һандар һәм хәрефтәр тәртибендә бирергә кәрәк була.

3-сө (С) өлөшөндә һорауҙарға ҡыҫҡа ғына яуаптар бирергә кәрәк буласаҡ, был яуаптар һүҙҙәрҙән йәки һүҙбәйләнештәрҙән тороуы мөмкин, яуабығыҙ 17 знактан артмаһын.

4-се өлөштә текст буйынса инша яҙырға кәрәк булыр, уны 2-се һанлы яуаптар бланкыһында башҡарығыҙ.

Принтерҙан сығарып алған яуаптар бланкыларында үҙегеҙ тураһында мәғлүмәтте, һорауҙарға яуаптарҙы тултырып, иншаны яҙғандан һуң, был бланкыларҙы сканер аша үткәрегеҙ (бик булмағанда фотоға төшөрөгөҙ, йә компьютерығыҙҙа булған Paint программаһында эшләгеҙ, былай тағы ла уңайлыраҡ) һәм электрон вариантын сайтҡа элегеҙ. Сканкопияғыҙ (фотокопияғыҙ) бик асыҡ, таҙа һәм уҡымлы булһын. Уңыштар һеҙгә!

**Текст**

(1)- Әсәй, икмәк! – (2)Айрат тыштан килеп инде лә, аяғын сисеп-нитеп тормайынса, туп-тура кухняға ынтылды. (3) Тик эстә әсәһе түгел, апаһы булып сыҡты. (4)Ул шунда ятҡан ҡаты һыныҡты алып бирҙе. (5)Айрат ҡабып ҡына ҡараны ла, икмәкте кире ырғытты:

– Нимә ҡатып бөткән һыныҡ тоттораһың!

– (6)Һы, ҡатып бөткән һыныҡ!.. (7)Кем ҡатырған уны? (8)Ана, үҙең ашап бөтмәйенсә ҡалдырып киткәнһең дә... (9)Ашап ҡуй һынығыңды!

– (10)Ярар, аҡыл һатма әле бында! (11)Икмәк бөткәнме ни! – (12)Ул эскә үтте. (13)Апаһының, ҙур кешеләй булып, өйрәтеп маташыуы малайҙың сәменә тейҙе. (14)Әммә тегенең дә бирешкеһе килмәне, икмәк һауытын ябып уҡ ҡуйҙы.

(15)Быларҙың шулай тыҙ-быҙ итеүенә түрьяҡтан әсәләре килеп сыҡты. (16)Эштең ниҙә икәнен төшөнгәс, Айратҡа:

– Апайың дөрөҫ әйтә, улым, бар тип, икмәкте тәләфләргә ярамай. (17)Унан да ҡәҙерле ни бар донъяла? (18)Ана, беҙ һуғыш ваҡытында...

– (19) Башланды тағы... – (20) Айрат, ҡотҡо сығарып тораһың бында тигәндәй, апаһына яман ҡарап алды ла, ашап тормай, сығып китергә самаланы. (21) Бер һыныҡ икмәк өсөн дә һүҙ ишетеп торорға ғәрләнде, буғай. (22) Әсәһе лә тапты ваҡыт, хәҙер нисек итеп бала саҡта аслы-туҡлы йәшәүҙәре, көҙ, ҡар төшкәнсе, башаҡ йыйыуҙары, яҙ ерҙә ҡалған серек картуфты ҡаҙып алып, шунан ҡоймаҡ бешереп ашауҙары, йыуа, ҡымыҙлыҡ тигән нимәләр йыйыуҙары, тағы әллә нәмәләр тураһында һөйләй башлаясаҡ. (23) Тыңлағанда ҡыҙыҡлығын ҡыҙыҡ та, әммә элек шулай йәшәгәндәр, тип ошо көндә лә ҡатҡан икмәк ашап ултырып булмай бит.

(Р. Солтангәрәев)

# 1-се өлөш

Был өлөштә 10 һорау, һәр һорауға 4 төрлө яуап килтерелә, шул яуаптар араһынан бер генә дөрөҫ вариантты һайлағыҙ

**A1 21-се һөйләмдә һандарҙың төркөмсәһен билдәләгеҙ:**

1. Йыйыу һаны
2. Төп һан
3. Рәт һаны
4. Сама һаны

**A2 5-се һөйләмдәге** *тоттораһың* **һүҙе ҡайһы юлда ялғауҙарға дөрөҫ бүленгән:**

1. *Тот-то-р-а-һы-ң*
2. *Тот-тор-а-һы-ң*
3. *Тоттор-а-һың*
4. *Тот-тор-а-һың*

**A3 9-сы һөйләмдә хәбәр булып килгән ҡылым ниндәй һөйкәлештә тора**

1. Хәбәр һөйкәлеше
2. Бойороҡ һөйкәлеше
3. Шарт һөйкәлеше
4. Теләк һөйкәлеше

**A4 14-се һөйләмдә хәбәр булып килгән ҡылымдарҙың һөйкәлештәрен билдәләгеҙ**

1. Хәбәр һәм хәбәр  һөйкәлеше
2. Шарт һәм хәбәр  һөйкәлеше
3. Бойороҡ һәм хәбәр  һөйкәлеше
4. Теләк һәм хәбәр һөйкәлеше

**A5 22-се һөйләмдә хәбәр булып килгән ҡылым ниндәй заманда тора**

1. Үткән заман
2. Хәҙерге заман
3. Киләсәк заман
4. Заманы юҡ

**A6 22-се һөйләмдә** ***ҡоймаҡ*** **һүҙе ниндәй килештә тора?**

1. Төп килеш
2. Төбәү килеш
3. Төшөм килеш
4. Сығанаҡ килеш

**A7 20-се һөйләмдәге** *апаһына* **һүҙе ҡайһы юлда ялғауҙарға дөрөҫ бүленгән:**

1. *Апа-һы-на*
2. *Апаһы-н-а*
3. *Апа-һын-а*
4. *Апа-һы-н-а*

**A8 15-се һөйләмдә яһалма исемде табып, уның һүҙьяһалыш юлын билдәләгеҙ**

1. Ялғау ҡушыу юлы
2. Һүҙҙәрҙе ҡушыу юлы
3. Һүҙҙәрҙе парлау юлы
4. Һүҙҙәрҙе эйәртеү юлы

**A9 9-сы һөйләмдәге** *һыныгыңды* **һүҙе ҡайһы юлда ялғауҙарға дөрөҫ бүленгән:**

1. *Һыныгың-ды*
2. *Һын-ыгың-ды*
3. *Һын-ыг-ың-ды*
4. *Һын-ыгы-ң-ды*

**A10 14-се һөйләмдә яһалма исемде табып, уның һүҙьяһалыш юлын билдәләгеҙ**

1. Ялғау ҡушыу юлы
2. Һүҙҙәрҙе ҡушыу юлы
3. Һүҙҙәрҙе парлау юлы
4. Һүҙҙәрҙе эйәртеү юлы

# 2-се өлөш

Был өлөштә 6 эш бирелә. Һорауҙары менән яуаптары ярашҡан варианттарҙы һандар һәм хәрефтәр тәртибендә бирегеҙ

**B1 Исемдәрҙең килешен билдәләгеҙ**

| | | | |
|---|---|---|---|
| 1 | тыштан килеп инде | А | Төп килеш |
| 2 | кухняға ынтылды | Б | Төбәү килеш |
| 3 | Айрат килеп инде | В | Төшөм килеш |
| 4 | һыныҡты алып бирҙе | Г | Сығанаҡ килеш |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| **B2** | **22-се һөйләмдә исемдәрҙең килештәрен билдәләгеҙ** | | | |
| 1 | башаҡ йыйыуҙары | А | Төп килеш |
| 2 | ерҙә ҡалған | Б | Төбәү килеш |
| 3 | картуфты ҡаҙып алыу | В | Төшөм килеш |
| 4 | ҡар төшкәнсе | Г | Урын-ваҡыт килеш |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| **B3** | **Яһалма исемдәрҙе табып, уларҙың тамырҙаш һүҙҙәрен билдәләгеҙ** | | | |
| 1 | икмәк | А | йыуыу |
| 2 | һуғыш | Б | ҡойоу |
| 3 | ҡоймаҡ | В | һуғыу |
| 4 | йыуа | Г | игеү |
| **B4** | *Ашауҙары* **һүҙендә ялғауҙарҙың төрҙәрен билдәләгеҙ** | | | |
| 1 | -а | А | Ҡылым яһаусы ялғау |
| 2 | -у | Б | Исем ҡылым ялғауы |
| 3 | -ҙар | В | Күплек ялғауы |
| 4 | -ы | Г | Эйәлек заты ялғауы |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| **B5** | **22-се һөйләмдә һүҙ төркөмдәрен билдәләгеҙ** | | | |
| 1 | аслы-туҡлы | А | Исем |
| 2 | әллә нәмәләр | Б | Сифат |
| 3 | серек | В | Алмаш |
| 4 | йыуа | Г | Рәүеш |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| **B6** | **Түбәндәге яһалма ҡылымдар ниндәй һүҙ төркөмөнән яһалған?** | | | |
| 1 | Тыз-быз итеү (15-се һөйләм) | А | Исем |
| 2 | Ҡатырыу (7-се һөйләм) | Б | Сифат |
| 3 | Тәләфләү (16-сы һөйләм) | В | Һан |
| 4 | Самаланы (20-се һөйләм) | Г | Оҡшатыу һүҙҙәре |

# 3-сө өлөш

Һорауҙарҙы уҡығыҙ һәм яуаптар бланкыһында ошо эшкә тәғәйен шаҡмаҡтарҙа өлгөгә ярашлы яуаптарын яҙығыҙ. Яуаптарығыҙ һүҙҙәрҙән йәки һүҙбәйләнештәрҙән тороуы мөмкин, яуабығыҙ 17 знактан артмаһын.

**C1** Тексҡа ниндәй исем бирер инегеҙ?
**C2** *Тәләфләү* һүҙенә синонимдар яҙығыҙ
**C3** «котҡо сығарыу»ҙы нисек аңлайһығыҙ?
**C4** *Турьяк* һүҙендә нисә хәреф, нисә өн?

# 4-се өлөш

Алда бирелгән текст буйынса инша яҙығыҙ. Автор тарафынан күтәрелгән проблемаларға, автор ҡарашына аңлатма бирегеҙ (текстан күпләп цитата ҡулланмағыҙ). Уның ҡарашы менән килешеүегеҙ-килешмәүегеҙҙе яҙығыҙ. Ни өсөн? Үҙ яуабығыҙҙы тормоштан йә китаптан уҡып алған миҫалдар менән дәлилләгеҙ.

Уҡылған тексҡа нигеҙләнмәйенсә яҙылған эш баһаланмай.

Әгәр инша тәҡдим ителгән текстың йөкмәткеһен генә һөйләп биреүгә ҡоролһа йә текст аңлатма бирелмәй генә күсереп яҙылһа, ундай эш нуль балл менән баһалана.

Иншаны бөхтә башҡарығыҙ, уны таҙа, аңлайышлы почерк менән яҙығыҙ.